

*Әхмәт* **СӨЛӘЙМӘНОВ**

# «Ватандаш» — энциклопедик журнал

Итен күр ҙә һурпаһынан төңөл, тигән кеүек, был мәҡәләнең аталышына күҙ һалыу менән, кемдәрҙер: «Һы, һалды хәбәрҙе! Ҡөллө ғәләмгә мәғлүм нәмә хаҡында: «Һөйөнсө!» — тип әйтәләрҙер шул!» — тип уйлауы бик тә ихтимал. Башына ундай уй килеүселәр, тимәк, «Ватандаш» журналын энәһенән-ебенә тиклем уҡып бара. Шуға күрә уларҙың әлеге уйы миңә лә уртаҡ.

Ысынлап та, өҫтәлебеҙҙә был журнал пәйҙә булғанға тиклем, ҡайһылай ҙа мәғлүмәти яҡтан ярлы, эстетик йәһәттән ҡарағанда, рухыбыҙҙы байытыр күпме мөмкинлектәрҙән мәхрүм булғанбыҙ.

Мәғлүмдер ки, бер нәмә лә үҙенән-үҙе хасил булмай. Аллаһы тәғәлә үҙе үк: «Бәндәм, сәбәп ит! Бирермен», — тип әйтә ти бит. Һүҙ барған журналыбыҙ ваҡытлы матбуғат (хәйер, уны «ваҡытлылар» теҙмәһенә теҙеү яҙыҡ булыр ине) орбитаһына сығыуға йәмәғәтселек үҙе сәбәпсе булды. Йәмәғәтселек сәбәп итеүгә заман сәбәп ҡылды.

Минең тиңдәштәрем һәм беҙҙән өлкәндәр уҡып түгел, күреп, кисереп яҡшы белә. Беҙҙең ил, дөрөҫөрәге, ил башлыҡтарының һәр быуыны, ҡулына уның менән идара итеү теҙгенен алғас (йә башта уҡ, йә шул теҙгенгә эҫенә төшкәс тә, әйтерһең, ете ятып та, беҙҙең төшөбөҙгә бер мәртәбә лә кермәгән, тик уларға ғына мәғлүм яҙылмаған алтын ҡағиҙәгә яраҡлашырға тырышып), берәй үҙгәреш иғлан итә һала. Йәнәһе, яңылыҡ индерә. Никита Хрущев реорганизация менән мәж килде. Республикалар менән өлкә һәм крайҙарҙы ҡушыу нигеҙендә (был эш РФ Конституцияһына һыямы-юҡмы, ул хаҡта уйлап та тормаҫтан) хасил булған хәҙерге округтарҙың үҙенсәлекле прообразы булған совнархоздарға беркетте. Элек, Башҡортостандың күп милләтле икәнен (дөрөҫөрәге, аҫаба башҡорттарҙан тыш, СССР-ҙа йәшәгән башҡа милләттәрҙең этник төркөмдәре беҙҙә күпләп төпләнеүен) иҫәпкә алып, рәсми сығыштарҙа: «БАССР — мини СССР», — тиһәләр, хәҙер юҡ-юҡта: «РБ — мини РФ», — тигәнде ишетергә була. Күрәһең, Хрущев шуны иҫәпкә алған, милли рес-

публикаларҙы бөтөрөүҙе көсәүсе бөгөнгө сәйәсмәндәрҙең хыялын алдан тойған. Тик, тотош оло ватаныбыҙҙы киң эксперимент майҙанына әйләндереүсе бөгөнгө реформаторҙарҙан айырмалы рәүештә (башы эшләүен әйт!), ошо уҡ маҡсатта тарыраҡ майҙанда эксперимент үткәреп ҡарарға булған. Тота килеп БАССР-ҙы ҡап уртаға бүлеп, Өфө һәм Стәрлетамаҡ өлкәләре ойоштороп ҡуйҙылар. Ярай әле, аҙаҡ ул ҡоролоштан баш тарттылар.

Горбачевтың һәм унан һуң үткәрелгән эксперименттарға тиклем үҙәктәге етәксе ни тиһә лә, автоматик рәүештә: «Йәрхәмбикалла!» — тип кенә торған халыҡ, турая биреп, тирә-яҡҡа баҡты ла, яманмы-яҡшымы, ана шул «перестройка», «прихватизация» дәүерендә: «Мин кем әле ул? Ҡем инем дә, кем булдым? Ҡем булырға йыйынам?» — тигәндәй итте. Һөҙөмтәлә, киң илебеҙҙең башҡа тарафтарындағы, улай ғына ла түгел, үҙ республикабыҙ эсендәге бүтән ҡәүемдәрҙән күрмәксе, милли йәмғиәттәр ойошторола башланы. Ахырҙа 1995 йылда төрлө ҡитғаларҙа йәшәгән башҡорттарҙың вәкилдәре йыйылышып, ҡор яһап, уставы, программаһы булған Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тигән халыҡ-ара берекмә төҙөп, уның Башҡарма комитетын һайланы. Ҡайҙа ғына йәшәмәһендәр, башҡорттарҙың рухи уяныуы, туғанлыҡ, берҙәмлек тойғоһона һынауҙы уңышлы тотоуы «Ватандаш» журналының тыуыуына сәбәпсе булды ла инде һәм тәүге һанынан алып уҡымлылығы, мәғлүмәткә бай булыуы менән шунда уҡ үҙенең уҡыусыларын тапты. Баштан уҡ уны шулай итеп сығарыу өсөн баш мөхәррир, танылған әҙәбиәт белгесе һәм әҙип, академик Ғайса Хөсәйенов «ете ҡат үлсәп, бер ҡабат киҫ!» принцибы буйынса, дөрөҫ юл һәм алым тапты. Һәр номерҙы тотош редакция коллективы ағзалары менән дә, уларҙың ҡатнашлығында, редколлегия, кәңәшселәр ҡоро менән дә барыһын да алдан уйлап, уртаға һалып хәл итте. Баштан уҡ унда «Рәсми бүлек», «Публицистика», «Иҡтисад», «Райондарыбыҙ, ҡалаларыбыҙ», «Әҙәбиәт», «Әҙәби тәнҡит», «Әҙәбиәт ғилеме», «Төркиәт ғилеме», «Хәтирәләр», «Рухи мираҫ», «Халыҡ ижады (фольклор)», «Сәнғәт», «Тарих», «Мәғариф», «Ил азаматтары», «Экология», «Тәбиғәт», «Фән», «Дин», «Археология», «Социология» кеүек рубрикалар ғәмәлгә индерелде. Йылдар үтә килә, редакция хеҙмәткәрҙәренең дә, редколлегия, кәңәшселәр ҡороноң да составы үҙгәрә торҙо, баш мөхәррир ҙә яңырҙы. Хәҙер уны байтаҡ йылдар инде Фәрит Әхмәҙиев етәкләй. Әммә исемдәре бер аҙ үҙгәртелгән сүрәттә лә, рубрикалар, нигеҙҙә, һаҡланды. Улар араһында «Ҡоролтай тауышы», «Шәжәрә», «Философия», «Этнография», «Тел ғилеме», «Спорт» кеүектәре лә урын алғылай башланы. Рубрикаларына ҡарап ҡына, «Ватандаш» тик мәғлүм һөнәр эйәләре өсөн генә сығарыла икән тип уйларға ярамай. Юҡ, ул — уҡыусыларҙың киң аудиторияһын да хеҙмәтләндерә торған журнал. Әҫәби әҙәрҙәр генә түгел, публицистик материалдар күпләп урын алыуы, һәр төрлө белешмәләр бирелеүе лә шул турала һөйләй. Шулай ҙа, башҡа журналдарыбыҙ менән сағыштырғанда, унда, кинәнеп китеп, ғалим-ғөләмәләрҙең һәм бүтән махсус белгестәрҙең майҙан тотоуын да кире ҡағып булмай.

Әлеге яманаты сыҡҡан «перестройка» дәүерендә халҡыбыҙ рухи уяныу кисергәндә ишеткәнемдән. Милли-мәҙәни клубыбыҙ «Аҡ тирмә»нең сираттағы йыйыны мәлендә милли матбуғатҡа яҙылыу мәсьәләһе хаҡында һүҙ сыҡҡайны, кемдер: «Милли матбуғат милли булғаны өсөн генә лә, ул йәшәһен өсөн, ауыҙыңдан өҙөп булһа ла, уға яҙылырға кәрәк. Ул булмаһа, беҙ — күҙле

көйөнсә һуҡыр, ҡолаҡлы килеш тә һаңғырау булыр инек. Ана, Балтик буйы республикаларының төп халҡынан үрнәк алырға кәрәк: уҡыйҙармы-юҡмы, улар һәр йортҡа милли матбуғат алдыра», — тигәйне. Был фекер минең күңелемә уйылып ҡалды. Форсаты сығыу менән «Ватандаш», «Ағиҙел» журналын дүртәр дана алдыра башланым. Береһе — үҙемә, ҡалғандары балаларыма, ейән-ейәнсәрҙәремә традицион яңы йыл бүләге. Шөкөр, уларҙың барыһы ла башҡортса уҡый белә. Уҡырға форсаттары теймәһә, ҡараштырып сығып та, байтаҡ мәғлүмәт алырға була. Шул саҡта ундағы рубрикалар, айырым мәҡәләләр һәм әҫәрҙәр күҙгә ташланасаҡ. Кәрәк саҡта, энциклопедия һәм башҡа белешмәләр эҙләргә тотонғанда, ҡул ирекһеҙҙән «Ватандаш»ҡа үреләсәк. Әгәр энциклопедия аннотация кимәлендәрәк кенә мәғлүмәт бирһә, «Ватандаш» һине ҡыҙыҡһындырған тема буйынса кәрәк мәғлүмәтте сәйнәп ҡаптырғандай итәсәк.

Мин үҙем, шәхсән, фольклорсы булараҡ, «Ватандаш»тың һәр һанында тиерлек ауыҙ-тел ижадыбыҙҙың төрлө жанрҙары буйынса ҡыҙыҡлы материалдарға юлыға торам. Ғайса Батыргәрәй улы һәм башҡалар унда таныш эпостарҙың, башҡа халыҡтар менән уртаҡ эпик сюжеттарҙың варианттарын баҫтырҙы. Уларға рәхмәт тойғоһо менән ул әҫәрҙәрҙе «Башҡорт халыҡ ижады» томдарына индереп, беренсе тапҡыр халҡыбыҙға еткерҙем. Әгәр XX быуаттың икенсе яртыһында сыҡҡан күптомлыҡ «Башҡорт халыҡ ижады» тупламаһы составында эпостарыбыҙ ни бары ике ярым китап булып ҡына (әҙерләүселәре — Мөхтәр Сәғитов, Нур Зарипов) донъя күрһә, хәҙер халыҡҡа улар алты томда барып етте (быларын әҙерләүҙә хөрмәтле шул ике ағайҙарыбыҙҙан тыш, Бирйән Байымов, Салауат Галин һәм Ғайса Хөсәйенов, Миңнеғәле Нәҙерғолов, Зәйтүнә Шәрипова, Ф.Сибәғәтовтарҙың ҡатнашлығында ошо юлдарҙың авторы төҙөнө). Етенсеһе лә әҙер. Унығын үҙ инициативаһы менән Зәкирйән Әминев төҙөнө. Тимәк, был китаптар бөгөн Ватанға хеҙмәт итә икән, бында «Ватандаш»тың да роле ҙур. Журналыбыҙ милли фольклорыбыҙҙың бөтән жанрҙарына ла иғтибарын бүлә. Бында ауыҙ-тел ижады жанрҙары (Ғайса Хөсәйенов), Сергей Рыбаков яҙып алған йырҙар, ҡурай һәм ҡурайсылар (Юлай Ғәйнетдинов), легенда, риүәйәттәр (Борис Әхмәтшин), «Урал батыр» (Зәкирйән Әминев), тәңреселек, Танып башҡорттары ижады (Розалиә Солтангәрәева), әсирҙәр йыры (Әхәт Сәлихов), фольклорҙа туй йолаһының сағылышы (Сәлимйән Бәҙретдинов), әҙәбиәт һәм фольклор бәйләнештәре (Нәркәс Хөббитдинова-Сөләймәнова), ҡош-ҡорт культы (Азалия Илембәтова) хаҡындағы мәҡәләләрҙән, журнал уҡыусыһы булараҡ, шәхсән мин үҙем байтаҡ файҙалы фекергә аңымды байыттым. Һөнәре буйынса зоотехник, күңеле менән фольклор йыйыусы һәм уны оҫта башҡарыусы йырау-сәсән затлы Спартак Ильясовты журналдың ҡиммәтле табышы, тип атарға була. Сөнки ул беҙҙең барсабыҙҙың да фольклорыбыҙ хаҡындағы мәғлүмәтебеҙҙе байыта. Уның яҡташы Рәүеф ағай Насиров хаҡында ла шуны уҡ әйтергә булыр ине.

Башҡа рубрикаларҙың йөкмәткеһенә юрый туҡталманым. Улары — махсус белгестәрҙең өлөшө.

Тимәк, замандың ҡаршы елдәренә ҡарамай, биләгән позициянан тайшанмай, кәрәк икән, уны киңәйтә биреп, яңынан-яңы авторҙар йәлеп итә-итә, уҡыусыларына, һауа, һыу, ризыҡ, яҡтылыҡ һымаҡ, иң кәрәк журнал булып ҡалыу бәхетен теләйем «Ватандаш»ҡа!